**БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ ҠЫРМЫҪҠАЛЫ РАЙОНЫ**
**МУНИЦИПАЛЬ РАЙОН МАЛАЙ АУЫЛЫНЫҢ ТӨП ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ МӘКТӘБЕ**
**МУНИЦИПАЛЬ БЮДЖЕТ ТӨП ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ**

| | |
|---|---|
| «Ҡаралған» | «Раҫлайым» |
| ММБ етәксеһе | [illegible] директоры |
| Гәйфуллина М.Р. | [illegible]йфуллин Г.Й. |
| 1-се протокол | Бойороҡ һаны 135 |
| 30 август 2023 йыл | « 30» август 2023 йыл |

# Туған (башҡорт) теленән 1-4 класс өсөн эш программаһы

Дәреслек авторҙары:

1. "Әсә теле" 1 класс Ф.Ш.Сынбулатова ,Ы.Ә Исламголова
2. "Әсә теле" 2 класс Ф.Ш.Сынбулатова,Г.Ә.Вәлиева
3. "Әсә теле " 3 класс Ф.Ш.Сынбулатова, Г.Ә.Вәлиева
4. "Әсә теле" 4 класс Ф.Ш.Сынбулатова, Ы.Ә Исламголова

**Төҙөүсеһе : Йәлилова Ләйсән Өлфәт ҡыҙы**
**1 категориялы уҡытыусыһы**

**Малай ауылы –2023 йыл**

## Аңлатма яҙыу

1-4 класс өсөн туған башкорт әҙәбиәте программаһында федераль һәм республика закондары талаптары тормошҡа ашырыла;

-“Башҡорт теле” буйынса эш программаһы Рәсәй Федерацияһының 2012 йылдың 29 декабренән “Рәсәй Федерацияһында мәғариф

- Төп дәүләт дөйөм белем биреү стандарттарының федераль компоненты, рәсәй федерацияһы мәғариф һәм фән министрлығы бойороғо менән раҫланған. 2004 йылдың 05 мартында № 1089 Федераль законы;
- 2014 йылдың 31 мартында рәсәй федерацияһы мәғариф һәм фән министрлығы тарафынан дөйөм белем биреү мәктәптәрендә ҡулланыу өсөн Федераль дәреслектәр исемлеге тәҡдим ителгән приказы № 253 тураһында законы;
- 04.08.17 й. Башҡортостан республикаһының мәғариф министрлығы коллегияһы ултырышында ҡаралған «Башҡортостан республикаһының дөйөм белем биреү мәктәптре өсөн тәҡдим ителгән базис уҡыу планы” (бойороҡ № 4);
- Башҡортостан халыҡтары телдәре тураһында законы 15.02.1999 йыл №216-З;

Туған (башҡорт) теле предметының уҡыу планындағы урыны. Программа федераль дәүләт башланғыс дөйөм белем биреү стандартында раҫланған базис уҡыу пландарының икенсе төрөнә яраҡлы төҙөлгөн. Был базис уҡыу планында «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте» предметы уҡыу планының мотлаҡ уҡытыла торған (инвариант) өлөшөнә инә һәм уны уҡытыу аҙнаһына 1 сәғәт иҫәбенән ҡаралған. Башҡорт телен уҡытыуға 1-4 – се кластарҙа уҡытыу өсөн бөтәһе 135 сәғәт ҡарала. Шуның эсенән телде 1 класта уҡытыу өсөн 33 сәғәт, 2 класта – 34, сәғәт, 3 класта – 34 сәғәт, 4 класта – 34 сәғәт.

### Туған **(башҡорт) теле предметының өйрәнеү һөҙөмтәләре**

### Грамотаға өйрәтеү һәм “Башкорт теле” предметтарын өйрәнеү һөҙөмтәләре

”Башҡорт теле” программаһын өйрәнеү процесында уҡыусы өйрәнергә тейеш:

**1 класта:**

Шәхси үҫеш кимәле:

Уҡыусы статусын ҡабул итергә, уҡыу эшмәкәрлегенә өйрәнергә. Тыуған илгә, ергә, телгә, яҡын кешеләргә һөйөү тәрбиәләргә. Эшләгән эштәр, ҡылыҡ-фиғел өсөн яуаплылыҡ тойорға. Һау-сәләмәт йәшәйеш булдырырға.

Предмет кимәле:

- тел берәмектәрен айыра белергә (һүҙ, һүҙбәйләнеш, һөйләм, өн, хәреф);
- һүҙ, һүҙбәйләнеш, һөйләмде график-символик тамға ярҙамында тамғаларға;
- уҡырға(минутына 40-45 һүҙ);
- хәрефтәрҙе тейешле каллиграфик режимда яҙырға, уларҙы бер-береһе менән дөрөҫ тоташтырырға;
- һүҙ, һөйләм, текст уҡырға һәм яҙырға;
-3-4, 5-6 хәрефтән торған ябай ғына һүҙҙәрҙе грамоталы яҙырға;
- һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылыш ҡағиҙәләрен (орфограмма) (ҙур хәреф - кеше исем-фамилиялары, һүҙ башында в - [уы], [уэ] һәм я,е,ю,ё хәрефтәре; йә,йо,йу,йы, йө ҡушымсалары) белергә;

Метапредмет кимәле:

- уҡытыусыны тыңларға, унының әйткәнен ишетергә;
- өндәрҙе әйтергә, тыңларға, сағыштырырға, анализларға;
- уҡытыусыға һорау бирергә, белешмә алырға;

- икешәрләп йәки төркөмләм класташтары менән эшләргә;
- диалог барышында һөйләшеүҙә ҡатнашырға, унын темаһын күҙ уңында тотоп, үҙ фекерен әйтергә, кешенекен тыңларға;
- дәрестең темаһына ярашлы уҡыу мәсьәләһе ҡуйырға, уны сисеү максатында тикшереү эшендә әүҙем ҡатнашырға;
- график-символик һыҙмаларҙы танырға: һүҙҙҙең өн(хәреф) моделен, һөйләмдең һыҙмаһын төҙөргә һәм уҡырға;
- уҡыу һәм яҙыуҙы мәғлүмәт, белем алыу мөмкинселеге итеп ҡулланырға.

**2-се класта:**

1. Предмет буйынса белем алырға:

- һүҙҙәрҙе мәғәнәһе буйынса төркөмләргә,уларға тейешле һорау ҡуйырға;
- һүҙҙәрҙең өнмоделен төҙөргә,уны хәрефтәр менән яҙырға;
- һөйләмдәр төҙөргә,уларҙы тулыландырырға;
- һөйләмдәрҙе әйтелеү маҡсатына ҡарап хәбәр,өндәү,һорау һөйләмдәргә айыра белергә;
- һөйләмдең баш киҫәктәрен белергә ;
-һөйләмдә һаналып киткән һүҙҙәр араһында өтөр ҡуйырға;
-башҡорт теленең дөрөҫ яҙылышҡанундарын,ҡағиҙәләрен үҙләштерергә;
-8-10 һөйләмдән торған (35-40 һүҙ ) тексты күсереп яҙырға;
- 30-35 һүҙҙән торған тексты диктант итеп яҙа белергә;һүҙҙе ижеккә бүлергә,уны юлдан юлға күсерә белергә тейеш.

2.Универсаль эш төрҙәрен үҙләштерергә:

- үҙ-аллы уҡыу,мәғлүмәтле булыу оҫталығын камиллаштырыу,мәғлүмәти сығанаҡтар менән эш,эште планлаштырыу;
- алған мәғлүмәтте ҡағыҙға теркәү;билдәләмә,ҡағиҙә, алгоритм,һығымта һ.б. график схема,модель,таблица ярҙамында теркәргә;
- диалог ҡорорға,уҡыу материалын тикшерергә, анализларға, һығымта яһарға;
- мәҙәниле аралашыу этикетына өйрәнергә: әңгәмәсене тыңлай, хуплай белергә,аңламағанды итәғәтле итеп һорашырға, яуап алырға һәм рәхмәтеңде белдерергә; үҙ фекереңде ҡыҫҡа һәм аңлайышлы итеп еткеререргә , уны яҡлай белергә тейеш.

3.Шәхси сифаттарҙы үҫтереү өлкәһендә уҡыусы өйрәнә:

-үҙ-аллы эш итергә, белем алыу процесына етди һәм яуаплы ҡарарға;
- мәктәп йыһаздарын, уҡыу әсбаптарын һаҡларға;
- Тыуған илде яратырға, телде, илде һаҡларға;
- һаулыҡтыһаҡларға;
- тиҫтерҙәреңә, уҡытыусыларға, атай-әсәйеңә, яҡындарыңа, мәктәп хеҙмәткәрҙәренә иғтибарлы һәм ихтирамлы булырға.

**3-4-се класта:**

1. Шәхси сифаттарҙы үҫтерергә:

-үҙ аллы эш итергә , белем алыу процесына етди һәм яуаплы ҡарарға;
-атай-әсәйгә, тиҫтерҙәренә , уҡыусыларға, яҡындарына, мәктәп хеҙмәткәрҙәренә ҡарата ихтирамлы булырға;
- мәктәп йыһаздарына, уҡыу-әсбаптарына һаҡсыл булырға;
- Тыуған илде яратырға, ерҙе, телде һаҡларға;
- һаулыҡты нығытырға;
- ҡунаҡта, кинола йәки экскурсияла һәм башҡа йәмәғәт урындарында әҙәпле булырға, файҙалы ял итергә;
- кеше менән аралышыу этикетын үҙләштерергә.

2. Предмет буйынса белем алырға:

- һүҙҙең өн моделенә ярашлы һүҙ уйлап табырға;
- һүҙҙең өлөштәрен (тамыр һәм ялғау , яһаусы ялғау һәм яһалма һүҙ) айырырға.
- тамырҙаш һүҙҙәрҙе танырға, уларҙы башҡа оҡшаш һүҙҙәрҙән айырырға;
- тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәр һәм хәрефтәр,парлы-парһыҙ, яңғырау-һаңғырау, сонор тартынҡы өндәр, сиратлашып килеүсе тартынҡылар тураһында һөйләй белергә;
-һүҙгә фонетик анализ яһай белергә;
-ҡушма һүҙҙәрҙе танырға, уларҙың дөрөҫ яҙылышын аңлата белергә;
-үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе танырға һәм уларға дөрөҫ ялғау ҡуша белергә тейеш;
-һүҙ төркөмдәрен (предмет атамаһын, билдәһен, хәрәкәтен белдергән һәм ярҙамсы һүҙҙәрҙе ) таба белергә ;
-һөйләмдең баш киҫәктәрен айыра белергә;
-сюжетлы һүрәт , һорауҙар, терәк һүҙҙәр ярҙамында хикәйә, әкиәт ижад итергә.

3. Универсаль уҡыу эш төрҙәрен үҙләштерергә:

- үҙ аллы белем алырға , мәғлүмәт йыйырға һәм уларҙы ҡуллана белергә;
-дәрес барышында уҡытыусы менән берлектә эшләргә: дәрескә маҡсат ҡуйырға һәм уны дәрес һуҙымында күҙ уңында тота белергә һәм тормошҡа ашырырға, эште дөрөҫ планлаштырырға, эҙләнеү эше алып барырға;
-эҙләнеү эше һөҙөмтәләре буйынса презентация эшләргә;
-тиҫтерҙәре һәм оло кешеләр менән итәғәтле һөйләшергә, кеше менән мөнәсәбәт ҡороу оҫталығын үҙләштерергә;
-эшләгән эштәрен дөрөҫ баһаларға һәм кәрәк икән төҙәтмәләр индерергә.

Көйләүсе универсаль уҡыу эшмәкәрлеге:

- Тыуған илгә, уның теленә, мәҙәниәтенә, тарихына һөйөү һәм хөрмәт*;*
- төрлө ситуацияларҙа йәштәштәре һәм ололар менән хеҙмәттәшлек күнекмәһе, конфликтлы һәм бәхәсле ситуацияларҙан сығыу юлын белеү;- толерантлыҡ;
- башҡа кешеләрҙең хис-тойғоларын аңлай һәм билдәләй белеү, уртаҡлаша алыу;
- матурлыҡ тойғоһо – тәбиғәт матурлығын күрә белеү, йәнле тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш үҙеңдең һәм әйләнә-тирәңдәге кешеләрҙең ҡылыҡтарына дөрөҫ баһа биреү;
- мораль тәртип ҡағиҙәләрен көйләүсеэтик тойғолар – намыҫлана, ояла белеү, ғәйебеңде танып ғәфү үтенеү.

Танып-белеү универсаль уҡыу эшмәкәрлеге:

- телмәр ситуацияһына ярашлы үҙеңдең фекереңде телдән әйтеү;
- төрлө формала бирелгән мәғлүмәтте таба белеү (тотош текст, иллюстрация, схема, таблица)*;*
-мәғлүмәтте бер форманан икенсе формаға үҙгәртә белеү (план, схема, таблица төҙөү)*;*
-һүҙлектәр, белешмә материал менән менән файҙалана белеү*;*
-анализлай һәм синтезлай белеү*;*
-сәбәп-һөҙөмтә бәйләнештәрен урынлаштыра белеү*;*
-фекерләй белеү*;*

Коммуникатив универсаль уҡыу эшмәкәрлеге:

- һөйләү һәм яҙма формала яуап бирә белеү*;*
-телмәр сараларын төрлө коммуникатив мәсьәләләрҙе сисеүҙә дөрөҫ ҡулланыу;
- телмәрҙең диалогик һәм монологик формаларын яҡшы белеү;
-үҙеңдең фекереңде нигеҙләй белеү һәм дөрөҫ итеп башҡаларға еткерә алыу*;*
-башҡаларҙы ла ишетә һәм тыңлай белеү, уларҙың ҡараштарын аңларға тырышыу, кәрәк булғанда үҙеңдең ҡарашыңды төҙәтә белеү*;*
-дөйөм эшмәкәрлек барышында ҡарар ҡабул итә белеү*;*
-һорауҙар бирә белеү.

**4-се класс**

• өйрәнелгән орфограммаларҙы эсенә алған 60 — 70 һүҙҙән торған тексты грамоталы яҙа

белергә;

• һүҙҙе яһалышы һәм һүҙ төркөмдәре буйынса тикшерә белергә (исемдең һанын, килешен, эйәлек затын; ҡылымдың һанын, заманын һәм затын; сифаттың дәрәжәһен атай белергә);

• 70 — 80 һүҙлек текст буйынса өйрәнеү изложениеһы; тирә-яҡтағы объекттарҙы һүрәтләп, тәбиғәт күренештәрен, хәл-ваҡиғаларҙы эҙмә-эҙлекле бәйән итеп, хикәйә (текст) төҙөп яҙа белергә;

• мәҙәниәтле аралашыу оҫталығына, телмәр этикетына эйә булырға; аралашҡанда урынлы ваҡытта ғәфү үтенә, рәхмәт әйтә белергә;

• үҙендең фекеренде яҡлағанда, уй-тойғоларынды еткергәндә телмәренде аныҡ, эҙмә-эҙлекле бәйән итеп, тыныс, итәғәтле итеп еткерә белергә; әңгәмәсенең уй-тойғоларын аңлай, уның фекере менән иҫәпләшә һәм уртаҡ фекергә килә белергә тейеш

## Грамотаға өйрәтеү һәм “Башҡорт теле” дәрестәре темаларының йөкмәткеһе
## 1-се класс

Башҡорт теле

**Фонетика**. Әлифба осоронда «өн һәм хәреф» темаһы буйынса алған белемдәрҙе системаға килтереү. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр. Нәҙек һәм ҡалын һүҙҙәр. Уларҙы тамғалау. **Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар**. Ижек. һүҙҙе ижеккә бүлеү. Һүҙҙе юлдан юлға күсереү.

Һүҙ башында э хәрефе. Һүҙ уртаһында е хәрефе. Й хәрефенең яҙылышы. Йо, йө, йе, йү, йы, йә ҡушымсалары. Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә е, ё, ю, я хәреф-тамғалары. У-ү хәрефле һүҙҙәр.

**Һүҙ**. Предметтың атамаһын белдергән һүҙҙәр. Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр. Предметтың хәрәкәтен (эшен) белдергән һүҙҙәр. Һәм, менән, да-д!, ҙа-ҙә, ла-лә, та-тә, ғына- генә, ҡына-кенә ярҙамсы һүҙҙәре.

**Һөйләм**. һорау һөйләм. өндәү һөйләм. Хәбәр һөйләм. О-ө хәрефле һүҙҙәр. Һөйләмдең сиктәрен билдәләү.

Орфография һәм пунктуация. Кешенең исем- фамилияларын, хайуан ҡушаматтарын һәм ер-һыу атамаларын ҙур хәреф менән яҙыу. Ярҙамсы һүҙҙәрҙең айырым яҙылыуы.

**Универсаль уҡыу эш төрҙәре**. Уҡыу эшмәкәрлегенә өйрәнеү. Хәреф һәм өндәрҙе таныу. Ижектәрҙе һәм һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе ҡушып уҡыу. Текстарҙы аңлы һәм тасуири уҡыу.

**Хәрефтәрҙе айырым һәм бер береһе менән тоташтырып яҙыу.** Һүҙ һәм һөйләмдәрҙе, ҡыҫҡа текстарҙы күсереп яҙыу. Ишеткәнде яҙыу (диктант). Уҡытыусы ҡуйған һорауға тулы һәм асыҡ яуап биреү, дәрестә иғтибар менән тыңлау, уҡытыусы ҡушҡанды аңларға өйрәнеү.

**Үҙ-ара һөйләшеү (диалог) ҡороу**. Тел күренештәрен күҙәтеү, сағыштырыу, анализлау һәм һығымта яһау. Үҙ аллы белем алырға өйрәнеү. Уҡытыусы ярҙамында маҡсат ҡуйыу. Эште планлаштырыу һәм уның буйынса эшләү. Тикшереү. Эште баһалау.

## 2-се класс

**Графика. Өн һәм хәреф.** Хәреф һәм өн. Ике өндө белдереүсе хәрефтәр : я, е, ё, ю. У, ү хәрефтәренең ике өндө белдереүе. В хәрефенең үҙенсәлеге. Һуҙынҡыларҙың һүҙҙәрҙе үҙгәртеүҙәге, яңы һүҙҙәр яһауҙағы һәм үҙҙәренең янында торған тартынҡыларҙың

ҡалынлығын йәки нәҙеклеген билдәләүҙәге әһәмиәте. Һүҙҙе юлдан юлға күсереү, абзац. Һүҙҙең өн моделе.

**Морфология**.Һүҙ төркөмдәре.

**Предмет атамаһын белдереүсе һүҙҙәр**. Кем? Кемдәр? Нимә? Нимәләр? һорауына яуап биреүсе һүҙҙәр. Уларҙың белдергән мәғәнәһе. Кешенең исем – фамилияһын , хайуандарҙың ҡушаматтарын, ер – һыу атамаларын белдереүсе һүҙҙәр, уларҙы хәреф менән яҙыу.

**Предметтың хәрәкәтен белдереүсе һүҙҙәр**. Уларҙың белдергән мәғәнәһе. Ни эшләй? Ни эшләне? Ни эшләр? һорауҙарына яуап биреүсе һүҙҙәр. Уларҙың һөйләмдәге әһәмиәте һәм урыны.

**Предмет билдәһен белдереүсе һүҙҙәр**. Уларҙың аңлатҡан мәғәнәһе, әһәмиәте. Предмет билдәһен белдереүсе һүҙҙәре булған һүҙбәйләнештәр.

**Һүҙьяһалыш**. Тамырҙаш һүҙҙәрҙе уҡыу, яҙыу, төркөмләү.

**Синтаксис**.Һүҙ, һүҙбәйләнеш, һөйләм. Уларҙың оҡшашлығы һәм айырмаһы. Әйтеү маҡсаты буйынса һөйләм интонацияһы һәм төрҙәре. Хәбәр һөйләм. Һорау һөйләм. Өндәү һөйләм. Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре. Эйә, хәбәр, эйәрсән киҫәктәр.

**Орфография һәм пунктуация.** Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен өйрәнеү һәм ғәмәли ҡулланыу. Йә, йө, йү, йе, йо, йы ҡушымсалы һүҙҙәр. Һүҙҙәрҙә ике өндө белдергән я, е , ё,ю хәрефтәрҙе. Һүҙ башында [уы],[ үэ] өндәре , в хәрефе. Һөйләмдең баш хәреф менән яҙылышы. Кешенең фамилияһы һәм исеменең, хайуан ҡушаматтарының, ер –һыу атамаларының баш хәреф менән яҙылышы. Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәр аҙағында тыныш билдәләре. Һаналып киткән һүҙҙәр араһында тыныш билдәләре.

**Телмәр үҫтереү**. Аралашыу ситуацияһы. Уға ярашлы һөйләшеү (диалог) төҙөү. Текст. Тексты таныу. Текстың атамаһы. Текст төҙөү. Монолог. Аралашыу этикеты.

**Универсаль уҡыу эш төрҙәре.** Үҙ аллы белем алыуҙың башланғыс алымдарын өйрәнеү. Уҡыу эшмәкәрлеге буйынса башланғыс күнекмәләр алыу. Аралашыу мәҙәниәте.

## 3-сө класс

**Фонетика һәм орфоэпия.**

Өндәр һәм хәрефтәр.Һүҙ моделе. Нәҙек ҡалын һуҙынҡылар.Һуҙынҡылар таблицаһы. Тартынҡылар. Уларҙың таблицаһы. Яңғырау- һаңғырау тартынҡылар. Талғын (сонор) өндәр. Һүҙҙә сиратлашыпкилгән тартынҡылар (теләк-теләге) , тараҡ-тарағы, китап-китабы) һ.б. Нәҙек ҡалын әйтелешле һүҙҙәр. Һүҙҙең өн-хәрефенә(фонетик) анализ .

**Һүҙ составы (морфемика).**

Һүҙ составы(тамыры һәм ялғауҙары). Тамырҙаш һүҙҙәр. Уларҙың тамыры. Яһаусы ( суффикс), үҙгәртеүсе ялғауҙар. Һүҙьяһалыш. Ҡушма һүҙҙәр. Ҡушылып яҙылыусы ҡушма һүҙҙәр. Ҡабатлау йәки ишләү юлы менән яһалған ҡушма һүҙҙәр. Уларҙың һыҙыҡса аша яҙылышы. Ҡушма һүҙҙәргә нәҙек айырыу ҡалын айырыу билдәләренең яҙылышы. Һүҙ составы буйынса анализ.

**Орфография һәм пунктуация.**

Ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышы. Ялғауҙарҙың ҡушылып яҙылыуы. Ялғау ҡушҡанда бер иш ҡуш тартынҡы барлыҡҡа килеүе.

Тамыр һүҙҙәрҙәге о-ө, ы-е хәрефтәренең ялғау ҡушҡанда ла һаҡланыуы. О-ө, ы-е хәрефтәренең тамыр һүҙҙәрҙә яҙылмау осраҡтары. Нәҙеклек билдәһенә бөткән һүҙҙәрҙә ялғауҙарҙың яҙылышы.

Грамоталы күсереп яҙыу. Диктант, өйрәтеү изложениеһы, миниатюр инша.

**Синтаксис.**

Һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнеште, һөйләмдәрҙе айырыу. Уларҙың оҡшашлыҡтары, айырмалылыҡтары. Һөйләмде һүҙбәйләнештәргә тарҡатыу. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибен үҙләштереү. Һөйләү маҡсатына ҡарап, һөйләмдәрҙе өс төргә айырыу: хәбәр, һорау һәм

өндәү һөйләмдәр.Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре. Һөйләмдең тиң киҫәктәре. Һөйләмгә синтаксик анализ.

**Морфология.**

Үҙ аллы һүҙ төркөмдәре. Ярҙамсы һүҙҙәр.

Предмет атамаһы. Уны һөйләмдә ҡулланыу. Исемдең һорауҙары. Яңғыҙлыҡ исемдәр. Кеше исем-шәрифтәренең, хайуан ҡушаматтарының, ер-һыу атамаларының, китап, газета-журнал исемдәренең ҙур хәрефтән яҙылышы. Мәғлүмәт алыу ысулдары Күренекле кешеләр тураһында белешмә алыу. Улар тураһында текст төҙөү.Алты-ете балалар яҙыусыларының исем-шәрифтәрен белеү.

Билдәне белдергән һүҙҙәр. Уларҙың исем алдынан килеүе. Һөйләмдә аныҡлаусы ролен үтәүе.

Хәрәкәтте белдергән һүҙҙәр**.** Һөйләмдә уларҙы таныу , моделен һыҙыу. Уларҙың һөйләмдә хәбәр ролен үтәүе.Уларҙың дөрөҫ яҙылышы.

**Лексика.** Һүҙҙең лексик һәм грамматик мәғәнәһе.Тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәр. Омонимдар , синонимдар, антонимдар. Нығынған һүҙбәйләнештәр менән һөйләмдәр төҙөү.

**Телмәр һәм уның төрҙәре.**

Һөйләү телмәре.Диалог. Әңгәмәсе менән диалог ҡороу. Аралашыу оҫталығын шымартыу. Монолог. Уны һөйләү оҫталығы. Эске телмәр. Ым-ишара.Уйлау,хыял итеү. Хикәйә. Әкиәт. Шиғыр.

Тексты логик яҡтан тамамланған өлөштәргә бүлеү. Уларға исем ҡушыу. Абзац. Ҡыҙыл юл. Бәләкәй күләмле хикәйәләрижад итеү.

## 4-се класс

**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе :**

**Фонетика. Һүҙьяһалыш**. Өндәрҙе һәм хәрефтәрҙе сағыштырыу.Һүҙҙәргә тулы фонетик анализ тәртибен үҙләштереү.

**Өн һәм хәреф**. Һүҙҙәргә фонетик анализ. Ярҙамсы һүҙҙәр.

**Һөйләм**. Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәрен таба белеү.Һөйләмдең нигеҙен билдәләү. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибен күҙәтеү.Һөйләмде синоним, антоним һәм фразеологизмдар менән байытыу. Тиң киҫәктәрҙе билдәләү.

**Исем.**

Башҡорт телендә исем. Уның аңлатҡан мәғәнәләре. Берлек һәм күплек мәғәнәләре. Шул мәғәнәләрҙе белдереүсе саралар(ялғауҙар). Килештәр. Исем ялғауҙары. Әҫәрҙең темаһын төп фекерен билдәләү күнекмәләре.

**Алмаш**.

Алмаштың телмәрҙә үтәгән вазифаһы, мәғәнә үҙенсәлеге. Зат алмаштары. Телмәрҙә ҡулланылышы.

Башҡорт халҡының талантлы ижад кешеләре тураһында уҡыу һәм һөйләү. Ижад төрҙәре менән таныштырыу. Ижад кешеләре тураһында ҡыҫҡаса белешмәләр төҙөү.

**Сифат.**

Сифат. Уның мәғәнәләре. Сифат дәрәжәләре тураһында белешмә алыу. Төп һәм шартлы сифаттарҙы сағыштырыу һәм айырырға өйрәнеү.

Матур әҙәбиәттә көҙҙөң сағылышы. Башҡортостанда көҙгө тәбиғәт, балаларҙың һәм ололарҙың көҙгө эштәре, көҙгө байлыҡ тураһында хикәйәләр, шиғырҙар, мәҡәләләр уҡыу һәм һөйләү. “Көҙ” темаһына ҡарата экскурсиялар ойоштороу, япраҡтарҙан коллекциялар әҙерләү, һүрәттәр төшөрөү, ижади эштәр күргәҙмәһе ойоштороу.

**Рәүеш**.

Рәүеш тураһында төшөнсә алыу, билдәләрен күҙәтеү, сағыштырыу нигеҙҙәрен асыҡлау. Рәүеш төркөмсәләрен өйрәнеү.

Кешенең яҡшы һәм насар сифаттары тураһында әкиәттәр уҡыу, йомаҡтар ҡойоу, мәҡәлдәр, көләмәстәр менән эште дауам итеү. Шуларға нигеҙләнеп, һығымталар яһарға өйрәтеү, яҡшы сифаттар тәрбиәләү. Әкиәттәр буйынса инценировкалар төҙөү һәм сығыш яһау, әкиәттәргә, йомаҡтарға, мәҡәлдәргә бағышланған иртәлектәр ойошторо у.

**Ҡылым.**
Илебеҙ халыҡтарының хеҙмәте, бөгөнгө көн геройҙары, уларҙың Тыуған илгә, хеҙмәткә, уҡыуға ҡарашы; балаларҙың хеҙмәте тураһында әҫәрҙәр уҡыу. Данлы кешеләр менән осрашыу, әңгәмәләр үткәреү, уҡылған әҫәрҙәр буйынса һүрәттәр төшөрөү.
Ҡылым. Ҡылым тураһында төшөнсә алыу. Унын заман мәғәнәләре. Заманды күрһәтеүсе саралар (ялғауҙар). Текстың йөкмәткеһен төрлө заманда һөйләү. Текстағы һүрәтләү саралары. Изложение һәм инша яҙыу өсөн материал йыйырға өйрәтеү.
**Һан.**
Һан тураһында төшөнсә. Һан төркөмсәләре. Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы.
Ватан, мәктәп, уҡыу, уға мөнәсәбәт тураһында мәҡәләләр, шиғырҙар уҡыу һәм әңгәмәләр үткәреү.Башҡорт теленең өндәре һәм хәрефтәре (ҡабатлау һәм тәрәнәйтеү) . Әҫәрҙең темаһы һәм төп фекере.
**Һүҙҙәрҙең күп мәғәнәлелеге.**
Һүҙҙәрҙең төрлө мәғәнәгә эйә булыуы.Аңлатмалы һүҙлектәр менән эшләү.

## Тематик план

1 класс

| № | Тема | Сәғәт һаны |
|---|---|---|
| | Граматаға өйрәтеү | |
| 1 | Предмет һәм һүҙ | 2 |
| 2 | Һүҙҙең исем атау функцияһы | 9 |
| 3 | Һөйләм | 4 |
| 4 | Ярҙамсы һүҙҙәр | 5 |
| 5 | Өн. Һүҙ | 16 |
| 6 | Әлифба осоро | 74 |
| | Бөтәһе | 110 |

2 класс

| № | Тема | |
|---|---|---|
| 1 | Графика | 5 |
| 2 | Морфология | 6 |
| 3 | Һүҙъяһалыш | 10 |
| 4 | Синтаксис | 3 |
| 5 | Орфография һәм пунктуация | 5 |
| 6 | Телмәр үҫтереү | 4 |
| | Конторль эш<br>Бөтәһе | 3<br>34 |

3 класс

| № | Тема | Сәғәт һаны |
|---|---|---|
| 1 | Фонетика һәм орфоэпия | 7 |
| 2 | Һүҙ составы | 3 |
| 3 | Орфография һәм пунктуация | 5 |
| 4 | Синтаксис | 4 |
| 5 | Морфология | 5 |
| 6 | Лексика | 3 |
| 7 | Телмәр һәм уның төрҙәре | 3 |
| | Контроль эш<br>Бөтәһе | 4<br>34 |

4 класс

| № | Тема | |
|---|---|---|
| 1 | Сингармонизм күренеше, һүҙҙең тамыры һәм ялғауы . Орфограммалар | 7 |
| 2 | Һүҙ төркөмдәре | 3 |
| 3 | Исем | 4 |
| 4 | Ҡылым | 4 |
| 5 | Сифат | 4 |
| 6 | Һан | 1 |
| 7 | Алмаш | 3 |
| 8 | Ҡабатлау | 3 |
| 9 | Контроль эш<br>Бөтәһе | 4<br>34 |